МУНИЦИПАЛЬ МӘКТӘПКӘСӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ БЮДЖЕТ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
БАЛА ҮҪТЕРЕҮ ҮҘӘГЕ – “АҠБУҘАТ” БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ

*Күңел асыу сараһы:*

# "Тыр-тыр беҙҙә ҡунаҡта!"

# Өлкәндәр төркөмө.

# Тыр-тыр беҙҙә ҡунаҡта.

Зал байрамса биҙәлгән.

**Алып барыусы:** Һаумыһығыҙ хөрмәтле тамашасылыр. Беҙ бөгөн һеҙҙе Тамыр студияһында күреүебеҙгә бик шатбыҙ.

Беҙҙең бөгөнгө осрашыу 8 март Халыҡ – ара ҡатын – ҡыҙҙар көнөнә бағышланған. Бөгөн студияла бик матур йырҙар, бейеүҙәр һәм уйындар тәкдим ителер. Ә инде байрамдың биҙәге булып, хөрмәтле әсәйҙәр, өләсәйҙәр һәм апайҙар һеҙҙең балаларығыҙҙың сығышын тәкдим итәбеҙ. Студияла, шулай уҡ һеҙҙең дә актив булыуығыҙ һорала. Ә хәҙер, тапшырыуыбыҙҙың төп геройҙарын ҡаршы алайыҡ.

(Музыка уйнай, балалар сығалар һәм ярым түңәрәккә торалар.)

**Алып барыусы:** Әсәй! Ошо һүҙҙе ишетеү менән күңелдәр яҡтырып китә. Шатлыҡ булһын мы, ҡыйын булһын мы беҙ һәр саҡ иң беренсе әсәйгә киләбеҙ. Әсәй, ул йыуата ла ала, кәңәш бирә лә ала. Ул иң ышаныслы кеше донъяла-тип һөйләйҙәр үҙҙәренең шиғырҙарында беҙҙең балалар.

***Шиғырҙар***

**Алып барыусы:** Бөгөнгө тапшырыуыбыҙ ҡәҙерлеләрҙән – ҡәҙерле, ғәзиздәрҙән – ғәзиз әсәйҙәребеҙгә бағышлана. Ниндәй мәрхәмәтле, изге йөрәкле ул әсә! Һин бишектә ятҡанда тау саҡлы мәшәҡәт сиккән кеше ул – һинең әсәйең. Иң беренсе һүҙҙе әйтергә, тәпәй баҫырға өйрәткән кеше ул. Һаҡлаусы, яҡлаусы, йыуатыусы, дәрт биреүсе лә әсә.

Һеҙҙең өсөн хөрмәтле әсәйҙәр, балаларығыҙ башҡарыуында йыр

***Йыр “Әсәйемдең байрамы”.***



(Балалар урындарына ултыралар)

Ҡулына хат тотоп Тыр – тыр йүгереп килеп инә.

**Тыр-тыр**: Һуңланым, һуңланым.

**Алып барыусы:**Ә мин һинең һуңлауыңа күнегеп бөткәнмен инде.

**Тыр-тыр:** Мин ни бына был хаттарҙы почтанан барып алғансы, һуңлап киткәнмен.

**Алып барыусы:**Тағы ниндәй хаттар?

**Тыр-тыр:** Ниндәй тип ни, ошо бөгөнгө тапшырыуға яҙған хаттар инде.

**Алып барыусы:**Әйҙә алып кил, уҡыйыҡ

**Тыр-тыр:** Ә-һә, хәҙер, мә.

(Хаттарҙы А.б-ға бирә һәм эргәһенә тора.)

**Тыр-тыр:** Был хатты "Бәпембә" төркөмөнең балары яҙған.

Ҡәҙерле Тамыр студияһы. Ер йөҙөндә иң гүзәл, иң ғәзиз һүҙ – ул әсәй. Беҙ әсәйҙәребеҙҙе ныҡ яратабыҙ, уларға ярҙам итәбеҙ. Ошо байрам көнөндә уларға йыр тапшырһағыҙ бик шат булыр инек.

**Алып барыусы:** Беҙ бөгөн уларҙың ҡотлауҙарына ҡушылабыҙ.

Әсә һөйөүе ҡояш кеүек
Тормош, Илһам бирә һәр йәнгә
Әсә һөйөүе биргән яҡты хистәр
Алып бара хатта йыһанға.



Ҡәҙерле әсәйҙәр, байрамығыҙ ҡотло булһын.

Һеҙҙең өсөн Гөлназ башҡарыуында йыр

***Йыр " Әртис".***

**Алып барыусы:**Хәҙер икенсе хатты уҡыйыҡ. Беҙҙең "Аҡбуҙат" балалар баҡсаһында күп тәрбисе апайҙар һәм уларҙың ярҙамсылары эшләй. Тәрбиәсе апайҙар беҙгә бик күп әкиәттәр уҡыйҙар, әүәләйбеҙ, рәсем төшөрәбеҙ һәм бөтә нәмәгә лә өйрәтәләр, ә ярҙамсылары төркөмдәребеҙҙе ялтыратып тоталар. Ошо байрам көнөндә уларға берәй музыкаль бүләк тапшырһағыҙ, бик шат булыр инек.

**Тыр-тыр**: Беҙҙә “Күгәрсен” төркөмөнөң ҡотлауҙарына ҡушылабыҙ. Хөрмәтле тәрбиәселәр, беҙҙең ярҙамсылар! Байрам менән һеҙҙе! Һеҙҙең өсөн

***Матростар бейеүе***

**Алып барыусы:** Тыр – тыр, ҡалған хаттарҙы аҙаҡ уҡырбыҙ. Әллә һин балаларҙы уйнатып алаң мы. Моғайын ошо тапшырыуға тип әҙерләгән уйының барҙыр ул.

**Тыр-тыр**: Кәнишнә бар!

***Тыр-тыр уйын уйната “Тупҡайым”***

*(Балалар түңәрәккә торалар,Тыр-тыр уртаға тра,балаларға алмашлап туп ташлай,кемгә туп эләгә,шул бала әсәһенә яғымлы һүҙ әйтә.)*



**Алып барыусы:** Әй, Т-т, молодец бит һин. Артабан хаттарыңды уҡыйыҡ әле. Тукта, ә был хатта нимә яҙғандар икән?

**Тыр-тыр**: Әллә мин әйтәм, ошо залда ултырған тамашасыларҙы әҙерәк уйнатып алайым мы икән?

**Алып барыусы:**Уныһы инде һинең ҡарамаҡта

**Тыр-тыр:**Улайһа, мин ни, хәҙер.

Хөрмәтле тамашасылар, әсәйҙәр, өләсәйҙәр, апайҙар. Мин һеҙгә һорауҙар бирәм, һеҙ шул һорауҙарға яуап биреп ҡарағыҙ

- Түңәрәк күлгә япраҡ яуа (Һалма)
- Үҙе генә ашалмай, унан башҡа аш бармай (Тоҙ)
- Аҡ тирмәнең ишеге лә, тишеге лә юҡ (Йомортка)
- Һурпаһын эсәләр, итен түгәләр (Сәй)

Әй, афарин, ҡалай зирәктәр бында йыйылған.

**Алып барыусы:**Тыр-тыр, әйҙә сираттағы хатты уҡыйыҡ.

Тәмле бәлештәр

Майлы бутҡалар

Бешерә беҙгә

Оҫта ашнаҡсылар.

**Тыр-тыр**: Мендәрем дә аҡ ҡына

Түшәгем дә аҡ ҡына

Иҙерәп йоҡлап китһәм

Төштәрем татлы ғына

**Алып барыусы:** Хөрмәтле әсәйҙәребеҙ беҙҙең оҫта ҡуллы ашнаҡсылар ҙа, кер йыуыусылар ҙа! Яҙҙың күркәм беренсе байрамы менән һеҙҙе ҡотлайбыҙ. Күңелдәрегеҙ шат, йөрәгегеҙ бәхетле булһын. Һеҙҙең өсөн йыр

***Йыр "Милая мама"***

**Алып барыусы:** Ә был хатта беҙҙең әсәйҙәрҙең төрлө һөнәр эйәләре булыуы тураһында яҙылған.Улар араһында шәфҡәт тутуштары ла,педагогтар ҙа,төҙөүселәр ҙә бар.Улар өсөн ҡотлау һоралған.

Ырыҫ бәхет һиңә юлдаш булһын

Күтәреңке булһын күңелең

Һаулыҡ – шатлыҡ, именлектә генә

Гөрләп үтһен бөтә ғүмерең

Хөрмәтле ҡатын-ҡыҙ һөнәр эйәләре һеҙҙе 8 март байрамы менән ҡотлайбыҙ һәм һеҙҙең өсөн музыкаль бүләк



***Бейеү "Дуҫлыҡ"***

**Тыр-тыр**: Ә хаттар бөттөме ни?

**Алып барыусы:**Юҡ әле, байрам дауам итә.

Ҡатын – ҡыҙҙар тормоштоң, донъяныңсәскәһе тиҙәр,

Улар булмаһа, донъяның бер йәме, бер тәме булмаҫ ине..

Тыт-тыр, мин сәскә тураһында һүҙ ҡуҙғалтҡас, һин нимә эшләргә тейешһең әле..

**Тыр-тыр**: Э- э – э , М – м – м.. Ә - ә - ә. Белдем. Онотоп торам.

***Уйын " Сәскә йый"***



*(Ике команда,эстафета формаһында тактала сәскә төҙөлә:сәскәнең уртаһы,биш тажы,һабағы,ике япрағы,шо өлөштәрҙән сәскә йыйыла)*

**Алып барыусы:**Студияла ултырған өләсәйҙәргә мөрәжәғәт итәйек.

**Тыр-тыр:** Эйе шул, мин дә шулай уйлайым.

**Алып барыусы:**Хөрмәтле өләсәйҙәр.Һеҙҙе 8 март Халыҡ – ара ҡатын ҡыҙҙар көнө һәм яҙ миҙгеленең тәүге байрамы менән ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ.

***Шиғырҙар***

**Байрам бүләге итеп "Минең өләсәйем"йырын тәкдим итәбеҙ.**

**Тыр-тыр**: Ҡара әле, миңә был тамашасылар менән уйнау бик оҡшап ҡалды бит әле. Әллә мин әйтәм, тағы берҙе уйнатып алайым мы, ә?

**Алып барыусы:**Әллә инде, балаларынан һора. Улар быға нисек ҡарарҙар.

**Тыр-тыр**: Балалар, әсәйҙәрҙе тағы бер тапҡыр һынап алайыҡ мы?

**Балалар**: Эйе

**Тыр-тыр**: ( йылмайып) Миңә ни шул һеҙҙең бер һүҙегеҙ етә ул.Миңә 4 әсәй кәрәк

***Уйын "Иң матуры"***

*(шләпә,мәрйен,очки,юбка уйын өсөн кәрәк булыр.Уйын эстафета формаһында,әсәйҙәр по очереди килеп кейенәләр,мин иң матуры тип ҡысҡырып әйтәләр,шунан сисеп һалалар икенсе әсәй кейенә,уйын шулай дауам итә.)*



***Йыр "Әсәкәйем-гүзәлкәйем"***

**Алып барыусы:** Был хатты беҙгә малайҙар яҙған

**Тыр-тыр**: Ниндәй малайҙар?

**Алып барыусы:** Ниндәй тип ни, ҡәҙимге, һинең һымаҡ, салбар, шортик кейгән малайҙар.

**Тыр-тыр:** Нимә яҙған булалар инде?

**Алып барыусы:** Был байрам беҙҙең ҡыҙҙарҙың да байрамы икәнен улар беләләр һәм шуға ҡотлау сәләме ебәргәндәр.

Хөрмәтле ҡыҙҙар. Беҙ һеҙҙе байрамығыҙ менән ҡотлайбыҙһәм һеҙгә уңыштар теләп ҡалабыҙ тигәндәр.

**Алып барыусы:** Байрам булғас, беҙ ҙә ҡыҙҙарыбыҙҙы буш ҡалдырмайыҡ һәм Тамыр студияһы исеменән ҡотлап байрам бүләге тапшырайыҡ.

***Ҡыҙҙарға бүләкәтәр биреү(малайҙар бирә)***

**Алып барыусы:** Күңелдәргә шиңмәҫ нурҙар тула
Яҙ байрамы булған өсөн ме
Иң ҡәҙерле итеп ҡабатлайм
“Әсә” – тигән бөйөк исемде.

**Алып барыусы:** Зәңгәр күктә ҡояш көлә,
Бөгөн әсәй байрамы
Әсәйҙәргә бүләк итәйек
Гөл сәскәләр бәйләме
Ал сәскә, гөл сәскә
Наҙлы матур аҡ сәскә
Бүләк итә кескәйең
Ҡабул ит һин, әсәйем!

***Балалар әсәләренә бүләк бирә.***

**Алып барыусы:** Рәхим ит! – тип ҡаршылайбыҙ,
Яғымлы, ҡояшлы ай.
Бөгөнәсәйҙәр йөҙөндә
Балкый ҡояш, балкый ай.
Әсәйҙәрҙе яратабыҙ
Һәр саҡ хөрмәт итәбеҙ
Байрам һайын беҙ уларға

Йырҙар бүләк итәбеҙ

***Йыр “Әсәйҙәр байрамы”***



**Алып барыусы:** Әсәй!

Оҙон – оҙаҡ йәшә һин ерҙә

Яҡты нурын һибеп донъяға.

Беҙ бәхетле, әгәр эргәбеҙҙә

Һин иҫән – һау ғына булғанда.

Әсәй!

Ырыҫ бәхет һиңә юлдаш булһын

Күтәреңке булһын күңелең

Һаулыҡ – шатлыҡ, именлектә генә

Гөрләп үтһен һинең ғүмерең.

Хөрмәтле тамашасылар, ошоноң менән өлкәндәр төркөмө балалары әҙерләгән ҡотлауҙар программаһы тамам. Киләһе осрашҡанға тиклем һау булығыҙ.

Ә инде студиялағы әсәйҙәрҙе һәм өләсәйҙәрҙе төркөм кафеһына саҡырабыҙ.